# Башҡорт милли аштары




Тереклек итеүҙең төп сығанағы булып тиҡланыу тора.Башҡорт халҡы борон-борондан аш-һыуға ныҡ иғтибарлы булған, уны бөхтә, талапсан, үҙенә генә хас оҫталыҡ менән әҙерләгән.Тәбиғәт тарафынан бирелгән һәр мөмкинлекте файҙалана белгән ғәзиз халҡым.

# Башҡорт милли аштары



Башҡорт милли аштары үҙенең төрлөлөгө менән айырылып тора. Башҡорттарҙа ҡамыр аштары ла, һөт һәм иттән әҙерләнгән аштар ҙа урын алған.

# Ҡунаҡтарҙы ҡаршылау



Хөрмәтле ҡунаҡтарҙы икмәк һәм ҡымыҙ менән ҡаршылау ҙа башҡорттарҙа борондан килгән йола.

# Башҡорт балы





Башҡорт балы үҙенең
һәйбәт сифаттары менән
бөтә ер йөҙөндә
дан тота.

# Башҡорт ҡымыҙы



Башҡорт халҡы борон замандарҙа уҡ йылҡы аҫраған, бейә һөтөнән ҡымыҙ эшләгән.

Ҡымыҙ – файҙалы эсемлек. Ул һыуһынды ҡандыра, үпкә ауырыуҙарын дауалай.

# Һөттән яһалған аҙыктар



Милли аш-һыу башҡорттарҙа малсылыҡ хужалығы нигеҙендә барлыҡҡа килә.Һөт һәм һөттән яһалған ризыҡтар мөһим аҙыҡ булған.



Һөттө айыртып, ҡаймаҡ, ҡаймаҡтан май яһағандар.Кышҡылыҡҡа сейәмайлағандар. Айыртылған һөттән ҡатыҡ ойотҡандар.Ҡатыҡтан йәй көндәрендә айран яһап эскәндәр.Ул һыуһынды ҡандыра.

# Ҡорот




Ҡатыҡты ҡайнатып, ҡорот эшләгәндәр һәм һурпаны ҡоротлап эскәндәр.Ҡоротто ҡышҡылыҡҡа киптереп алып ҡалғандар, сөнки ул бик файҙалы.

# Итле ризыҡтар.Ҡаҙылыҡ.



Башҡорттарҙың милли аш-һыуында итле ризыҡтар ҙур урын тотҡан. Иттән тултырма, ҡаҙылыҡ эшләгәндәр. Ҡаҙылыҡ йылҡы малының ас эсәгенән яртылаш ит, яртылаш ҡаҙы майы тултырылып эшләнә.



# Бишбармаҡ

Бишбармаҡ, ғәҙәттә, һарыҡ итенән бешерәләр. Итте эре киҫәкләп бешерәләр һәм һурпаһында һалма ҡайнаталар. Тәүҙә табынға һалма менән ит, ә аҙаҡтан ҡоротло һурпа бирәләр.



# Ҡуллама

Дүрткел итеп ҡырҡылған эре һалма, һимеҙ ит һәм картуф менән һәр кешегә айырым бирелә. Ә һурпаһы, ҡорот, һуған ҡушылып, кәсәлә йә туҫтаҡта тәҡдим ителә.

# Камыр аштары



Башҡорт милли-аш һыуҙары араһында ҡамыр аштары үҙенең төрлөлөгө менән айырыла.Улар араһында көл икмәге,әсе икмәк, көлсә, бауырһаҡ,ҡыҫтыбый, ҡош теле, ләүәш, ваҡ бәлеш һәм башҡалар.

# Кыҫтыбый

Был аш төрө өсөн иң тәүҙә ҡамыр баҫып ҡоймаҡ бешерәләр. Һуңынан эслеге өсөн тары бутҡаһы йә булмаһа картуфты бешереп иҙәләр.Эслеген һалғас, ҡоймаҡтарҙы тағы ла майлайҙар.



# Ваҡ бәлештәр



Сөсө ҡамырҙы тышлыҡ итеп, эсенә ваҡ итеп туралған картуф менән ит һалалар һәм мейестә бешерәләр.

# Бауырһаҡ

Башҡорт халҡы элек-электән ҡунаҡсыл халыҡ булған. Уныҡ һый түрен һәр ваҡыт бауырһаҡ биҙәп торған.



# Ҡош теле, урама





Ҡош теле лә, урама ла
ҡунаҡ ашы һаналған.



Башҡорт тирмәһендә аш-һыу мөйөшө

# Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!